## ≫ Анонсы



*Дважды «Отличник народного образования»*
**стр. 2**



*Себер китә ир – егеттәр...*
**стр. 3**



*Милләтебеҙ нуры – Миләүшә*
**стр. 4**


*Бергә һәм берҙәм булайыҡ!* Апрель 2017. № 5

# МИЛЛӘТ НУРЫ

ОБЩЕСТВЕННО-НАЦИОНАЛЬНОЕ ИЗДАНИЕ БАШКИР


## ≫ Новости

### В МЕЧЕТИ ГОВОРИЛИ О ГРАЖДАНСТВЕ, ВИЧ, ХАДЖЕ И БЕЗРАБОТИЦЕ



*Круглый стол в мечети*

В мечети Ноябрьска прошла встреча мусульман с представителями городских властей, ведомств и служб. Первым выступил руководитель территориального отдела роспотребнадзора Юрий Полищук. Он напомнил прихожанам мечети, желающим в этом году совершить хадж, о необходимости своевременно привиться от ряда заболеваний, в частности от менингококковой инфекции. Иначе паломников могут не пропустить на границе. Кроме того, существуют ограничения при провозе на территорию Саудовской Аравии продуктов питания. Со всего света на хадж в Мекку прибывает около четырех миллионов человек.

Один из прихожан рассказал присутствующим свою историю. Его сын уехал воевать в Сирию на стороне боевиков. По мнению мужчины, причиной такого поступка могло послужить то, что молодой человек не мог найти работу. Представитель городской службы занятости Тамара Аваряскина сказала, что в Ноябрьске уровень безработицы в три раза меньше вакансий. Официально зарегистрированных безработных пятьсот при том, что на местные предприятия требуются тысяча пятьсот рабочих.

Ильдар Муслахов, врач окружного СПИД-центра, сообщил, что сейчас в Ноябрьске и на Ямале в целом наблюдается рост распространения ВИЧ. В 2015 году было выявлено 205 больных. В 2016 – 270. Рост составил 30 процентов. Если ранее распространителями смертельной болезни являлись наркоманы, то сегодня разносчицами чаще выступают проститутки. Врач обратился к старейшинам мусульманских диаспор с просьбой, по возможности, контролировать поведение их земляков, приезжающих в город. Зачастую мужчины находятся вдали от своих семей и при близости с посторонними женщинами сильно рискуют заразиться смертельной болезнью. Несмотря на строгий запрет прелюбодеяния в Исламе, встречаются представители мусульманских диаспор, не соблюдающие этот закон.

Это вторая встреча верующих Ноябрьска с представителями администрации города и различных служб и ведомств.

### НОВЫЙ УРЕНГОЙ. НИКОЛАЙ КРАСНИКОВ СТАЛ ЧЕМПИОНОМ МФР ПО ГОНКАМ НА СНЕГОХОДАХ



*Николай Красников – чемпион МФР по гонкам на снегоходах*

Двадцатикратный чемпион мира по кольцевым гонкам на льду уфимец Николай Красников переориентировался на снегоходный спорт. И, как и раньше, выступил блестяще. Он занял в категории «Спорт» первое место и стал чемпионом мотоциклетной федерации России.

В интервью легендарный гонщик рассказал, что профессионально ледовым спидвеем больше не занимается. На мотоцикле выступает лишь на чемпионатах Европы. А вот гонки на снегоходах ему нравятся все больше с каждым днем. Спортсмен участвовал в турнире больше для опыта. Он намерен открыть спортшколу в Уфе и учить управлять снегоходом детей. Одной из причин таких изменений в карьере гонщик назвал желание готовить молодых людей к службе в армии. На вооружении в частях находятся снегоходы. Их надо осваивать. Спортсмен признается, что снегоходный спорт требует гораздо больше финансов, чем спидвей. Но это его не остановит.

Что касается турнира, то к финальным заездам в Новом Уренгое Николай Красников был лидером в своей группе и своего преимущества никому уже не отдал.

В гонках принимали участие профессиональные спортсмены, любители и дети. Юные гонщики и любители, в том числе представители коренных народов севера на «Буранах», участвовали в показательных заездах.

### РАБОТОСПОСОБНЫЕ МУЖЧИНЫ УЕЗЖАЮТ ИЗ БАШКОРТОСТАНА

Рустэм Хамитов на коллегии министерства экономического развития резко высказался по поводу миграционных процессов в Республике. В прошлом году за пределами РБ работали 148 тысяч человек, и всего 8 тысяч приезжали в Башкортостан. В соседнем Татарстане прибыло на три тысячи, а в Самарской области на две тысячи человек больше, чем выбыло. Хамитов отметил, что большое количество выходцев из Башкортостана трудится на севере Тюменской области: «Это сложилось не вчера или позавчера. Так было и 10-20 лет назад. Исторически в момент освоения нефтяных месторождений в Западной Сибири десятки и сотни тысяч человек из Республики Башкортостан привлекались на эту работу. Образовался этот феномен – привлечение наших работников в Сибирь. Он продолжает оставаться и работать сегодня».

Президент РБ назвал сумму инвестиций в триллион рублей, чтобы создать в регионе семьдесят тысяч рабочих мест и остановить отток населения. Инвестиции за прошлый год составили порядка 350 миллиардов рублей, чего явно недостаточно, чтобы переломить ситуацию. Президент добавил: «Надо понимать, что задача создания новых рабочих мест в тех объёмах, которые нам нужны, растянется на существенный период времени. Но нам нельзя ждать. Нам нужно действовать сегодня».

Пока Рустэм Хамитов попросил чиновников и специалистов разобраться с причинами негативных миграционных процессов.

## ≫ Культура

# БАШКИРЫ ЛАНГЕПАСА СЫГРАЛИ В СПЕКТАКЛЕ

***Второго апреля в Центре «Фортуна» г. Лангепас Ханты-Мансийского автономного округа состоялась премьера музыкальной комедии «Игеҙәктәр» («Близнецы») башкирского поэта и драматурга Ангама Атнабаева.***



*Постановка музыкальной комедии «Игеҙәктәр»*

В спектакле рассказывается об озорной молодости и светлой любви сестер-близняшек – Расимы и Расили. Главные героини борются за восстановление справедливости в своем колхозе и становятся «виновницами» личного счастья не только своих односельчан, но и приехавших в командировку журналистов.

Улыбки не сходили с лиц зрителей. Зал то и дело взрывался смехом. В благодарность за игру артистов награждили бурными аплодисментами. Было сказано много добрых слов в адрес артистов и главного режиссера–постановщика Амура Ахкамовича Ямалыева. К слову, в комедии сыграли актеры-активисты башкирской общественной организации «Шоңкар». Посмотреть спектакль пришли более ста человек.

**- Амур Ахкамович. Почему Вы выбрали эту пьесу? Есть много других, но чем Вам понравилась работа Ангама Атнабаева?**

- Дело в том, что мы могли бы ставить спектакли разных жанров. Но зрители часто не знают литературного башкирского языка. Тем более им сложно понять философию, заложенную в произведении. Поэтому мы стараемся подбирать именно такие спектакли, которые были бы ближе народу, понятнее. Вот поэтому остановились на музыкальной комедии Ангама Атнабаева «Близнецы». Поставить комедию было очень трудно. Сыграть трагедию гораздо легче. А ведь это не простая комедия, а музыкальная. Дело осложнилось тем, что у меня вообще нет вокалистов. К тому же все артисты – участники самодеятельного кружка.

**- Можно ли говорить о каких-то перспективах? Ведь действительно сложно работать в таких условиях.**

- О перспективах ничего сказать не берусь. Ситуация будет еще сложней, потому что из нашего коллектива уходят два опытных артиста - Зумара Латыпова и Миннезаки Хусаинов. Они переезжают в Башкортостан.

Башкирская общественная организация «Шоңкар» г. Лангепаса была создана в 2010 году. Уделяет огромное внимание сохранению родного языка, культуры, традиций. В обществе существуют два отделения: первое - любителей народной музыки и песен, второе – любителей театра и поэзии. Общественники регулярно радуют своих земляков представлениями и концертами, проводят дни культуры башкир, организовывают литературные вечера. Что касается театра, актеры поставили также спектакли «Ҡыҙ урлау», «Башмағым», «Бажалар». В коллективе много молодых людей и девушек, которые готовы продолжить дело своих старших коллег по сцене.

*Руслан ХУСНУЛЛИН,*
*г. Лангепас*

≫ Соплеменники

# ДВАЖДЫ «ОТЛИЧНИК НАРОДНОГО ОБРАЗОВАНИЯ»

***Наиля Сагадиевна Бикбулатова работает учителем начальных классов одной из школ г. Ноябрьска Ямало-Ненецкого автономного округа 31 год. За профессионализм ее дважды награждали высоким званием «Отличник народного образования». В первый раз она отказалась принимать звание. Только со второго раза руководству школы удалось уговорить преподавателя принять награду.***



*Наиля Бикбулатова за всю трудовую деятельность выучила 300 учеников*

**- Где Вы родились, учились?**

- Родом я из Хайбуллинского района, из башкирской деревни Кипчак. Этой деревушки уже нет. Там всего 24 дома было. Родители пожелали отдать меня в русскую школу. Поэтому мне приходилось ходить пешком в соседнюю деревню в двух километрах от Кипчака. Сейчас на месте Кипчака ничего не осталось. Люди разъехались.

**- А Вы своих односельчан видели после того, как окончательно покинули деревню?**

- Да, было. Мы как-то провели праздник «һаумыһығыҙ ауылдаштар» («Здравствуйте, односельчане!»). Вот там увидела своих односельчан.

**- А как Вы приехали на север?**

- Вышла замуж. Свадьбу сыграли в Башкортостане. Сначала друзья мужа уехали на Ямал. И как-то весной один его друг приехал и говорит: «Я привез ему вызов». Я говорю: «Я не поеду, не хочу». Муж говорит: «Я поеду». Я, конечно, не хотела его отпускать. Но он уехал. Только через два года сама приехала на север. Мы жили в балке. Потом нам дали квартиру с подселением. Мы там прожили четыре года. Там была еще одна семья из Украины. Мы так дружно жили, до сих пор с ними дружим. Потом переехали в отдельный дом.

**- Вам присвоили звание «Отличник народного образования». Расскажите об этом.**

- Это произошло в 2002 году. Мне было 44 года. Вручили за работу. Я сама не ожидала. В первый раз я отказалась от этого звания, потому что мне было стыдно.

**- Когда это было?**

- В 1997 году. Директор школы вызвал меня и говорит: «Наиля Сагадиевна, пришла награда. Мы выдвинули Вашу кандидатуру. У Вас высшее образование. Имеются разряды». Я говорю: «Вы что, Виктор Филиппович! Намного старше меня есть педагоги. Нет, - говорю, - я не согласна». Я прямо наотрез отказалась. В тот раз званием наградили Людмилу Павловну. Потом, уже во второй раз, другой директор подошел ко мне, и говорит: «Такое бывает раз в жизни. Что Вы делаете, Наиля Сагадиевна?» В этот раз я отказываться не стала.



*Наиля Бикбулатова - учитель начальных классов*

**- У Вас в семье сколько детей?**

- Двое, Рустам и Ильшат. Рустам работает водителем. Ильшат – юрист. Мне грустно, что старший, Рустам, так и не стал трудиться по специальности. Он самостоятельно поступил в ВУЗ на специальность «политолог-социолог». У него к изучению иностранных языков большие способности.

**- Вам обидно, что он не стал работать по специальности?**

- Он работает простым водителем. Поэтому чувствую свою вину.

**- А Вы подсчитывали когда-нибудь, сколько за годы работы в школе выучили детей?**

- В общей сложности около трехсот человек. Я ведь в Башкортостане еще учила старшие классы русскому языку и литературе.

**- А судьбу своих учеников Вы как-то отслеживаете? Были ли среди них те, кого Вы особенно сильно запомнили?**

- Они приезжают ко мне в гости. Дети даже возмущаются. «На Восьмое марта идут к тебе чай пить, - говорят. - Им делать что ли нечего? Мы, - говорят, - сроду не пойдем к своей учительнице».

**- Много бывших учеников приезжает?**

- Много. Даже, бывает, с женами приезжают. В прошлом году мы собирались вместе в кафе. Один из них в Москве работает. Он преподает в ВУЗе юриспруденцию. Одна работает в головном офисе «Газпрома».

**- Существует мнение, что во времена СССР к учителям относились гораздо лучше, чем сегодня. В те времена не могло быть и речи, чтобы родители, и уж тем более ученики, проявили неуважение к педагогу. Вы согласны с этим?**

- Частично. Я думаю, что это касается не всех. Мне, например, всегда с родителями везло. Они сделают все, что я их попрошу. Иногда, бывает, возникает ситуация, когда меня нужно подменить на уроке. Ни разу не было, чтобы родители отказались помочь. И отношения между нами дружеские. Все понимают, что самое главное - воспитать детей. Этого можно добиться только совместными усилиями.

**- Может, это частный случай?**

- Может быть. Но я им благодарна и считаю их своими коллегами в большом деле.

*Беседовал Денис АБДУЛЛИН*

≫ Ислам

# СУФИЗМ: МЕЖДУ ДОБРОМ И ЗЛОМ

***Суфизм авторы разных произведений называют то добром, то злом. Как мне представляется, для мусульман вопрос суфизма противоречив до взаимоисключения чаще всего из–за политики. Одно дело, когда вердикт по отношению к тасаввуфу выдают признанные крупные ученые. И совсем другое, когда в рассуждения о практиках суфиев включаются несчастные невежественные люди, слова которых в итоге становятся причинами раскола Уммы, преступлений и убийств.***

Тезис о том, что мусульманином является тот, кто соблюдает шариат, - основополагающее положение в исламе. Убеждения Ахлюсунна уаль джамаа строятся на идее уверования в необходимости совершать дозволенное и отвергать запретные деяния. То есть, к примеру, известно, что мусульманин обязан совершать пять намазов в сутки. Если верующий убежден в этом, он остается в исламе, даже если не практикует молитвы как положено. Если же он убежден, что намаз для верующего не обязателен, то выходит из ислама, даже в случае строгого пятикратного выполнения молитвы.

Что касается убеждений дозволенности греха, принцип тот же самый. В случае, если мусульманин полностью принимает положение о том, что, например, прелюбодеяние в исламе – харам, но совершает данный поступок, он все равно остается в исламе. Если же верующий убежден, что блуд в религии дозволен, он выходит из ислама, даже если не практикует его.

Здесь необходимо остановиться на вопросе методологии разработки шариатских решений. В исламе ответы абсолютно на все вопросы извлекаются из двух источников – Корана и сунны. То есть только на основании Книги и сунны то или иное действие объявляется дозволенным или запретным. Других источников нет.

Извлечением шариатских решений или выдачей фетв имеют право заниматься лишь специалисты в этом деле – исламские ученые, которых называют алимами, шейхами. Интересной представляется персона ученого. К нему предъявляются следующие требования – богобоязненность, знание арабского языка, знание Корана, сунны. Богобоязненность под собой подразумевает строгое подчинение принципу исполнения дозволенного и отвержения запретного, искренность в намерении служить лишь ради возвышения слова Аллаха, довольство каждой прожитой минутой с ее сложностями, проблемами. Что касается знаний арабского языка, Корана и сунны, то они должны быть на высшем уровне.

Вернемся к суфиям. Говоря простым языком, тасаввуф изначально появился как институт по воспитанию у верующего богобоязненности. Инструментом при этом является в первую очередь понятная каждому мусульманину практика – зикр. Суфии на протяжении суток многократно поминают имя Всевышнего. Какая-то из суфийских школ практикует громкий зикр, какая-то - про себя.

Но, по тем или иным причинам, временами появляются суфии, которые совершают зикр не как все. Например, вращения, бег по кругу или хлопания в ладоши. В частности, такие практики можно наблюдать в среде верующих Турции и Чечни. Мое личное мнение в этом вопросе заключается в том, что доказательства дозволенности таких действий и по количеству и по силе уступают доводам на запрет. Но кто я, чтобы выносить решение. Я могу лишь принять или отвергнуть для себя. А между тем, мнения ученых в этом вопросе разделились. Из шейхов, которые дозволяют подобные действия, по крайней мере с оговоркой об условии состояния практикующего в экстазе: Абдул-Кабир аль-Каттани, имам Ибн аль-Хаджар аль-Хайтами, Абдул-Кадыр Иса. Из тех, кто запретил - Имам Абу Абдиллях аль-Куртуби аль-Малики, Ибн Хаджар Аль-Аскалани, Мухаммад Саид Рамазан аль-Бути.

Одним словом, не все, что непонятно нам, может быть запретным однозначно. Надо хотя бы постараться вникнуть в тему и понять суть проблемы. Нельзя ни в коем случае торопиться с выводами, какими бы однозначными предметы разбирательства нам не показались.

Другой резонансный суфийский обряд – посещение могил праведников. Ваххабиты из-за обряда, во-первых, называют суфиев могилопоклонниками, во-вторых, выносят им такфир. История с могилами замечательна тем, что наглядно демонстрирует, насколько несерьезно люди относятся к доказательной базе, выяснению обстоятельств, чтобы вынести серьезное обвинение, которое стало причиной многочисленных убийств.

Но что же в действительности делают суфии у могилы? Как выясняется, например, обряд тавассуль. То есть просят Всевышнего, ради статуса умершего, исполнить просьбу. В частности такое происходит у могилы Пророка, мир ему, праведников. Напрямую у обитателей могил ничего не просят. Вообще-то до Ибн Таймии никто из ученых обряд тавассуля не критиковал. И, как уверены многие специалисты, начиная именно с этого осуждения, в Умме образовался первый раскол. И именно Ибн Таймия стал основным вдохновителем ваххабитов.

Подводя итог, можно констатировать, что сектанты совершенно неверно трактуют понятие многобожия. Это при том, что само явление тавассуль явно, никто его не практикует скрытно. Проверить, насколько оно соотносится с ширком, легче легкого. И при всем при этом сектанты упорствуют на своем. Иначе как следованием за собственными страстями я такое явление назвать не могу.

*Руслан АКЧУЛПАНОВ*

≫ Атайсал

# СЕБЕР КИТӘ ИР – ЕГЕТТӘР...

***Беҙҙең Урман-Бишҡаҙаҡ ауылынан ситтә Себер төбәктәрендә, Мәскәү, Санкт–Петербург ҡалаларында йөрөп эшләүсе ауылдаштарым байтаҡ. Улар араһында РСФСР-ҙың атҡаҙанған нефтсеһе Зөфәр һәм уның ҡустыһы Фәүкәт Булатовтар ҙа булды. Бер туған Вячеслав һәм Александр Герасимовтар, Федор һәм Валера Степановтар ситтә эшләүҙәренә ҡарамаҫтан, ауылда фермер хужалыҡтары ойоштороп, башҡаларға ла эш урындарын булдырҙы.***



*Ғәзим ҡатыны Фәрзәнә менән*

Бөгөн мин һеҙҙе эшлекле, киң күңелле ауылдаштарымдың береһе - үҙемдең егәрле, ярҙамсыл күршем - Ғәзим Ғинниәт улы Ишмөхәммәтов менән яҡынданыраҡ таныштырырға булдым. Беренсенән, ошо ауылда уҡытыусы булып эшләй башлағанда, уның ғына түгел бик күптәрҙең (хәҙер инде уҙҙәре олатай – өләсәй булдылар) бала саҡтары, үсмер йылдары минең күҙ алдында үтте. Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Ғинниәт ағай менән Фағилә апайҙың егәрле ғаиләһендә кесе йәшенән ауыл эшен яратып үҫте ул: бесәнен дә сапты, утынын да бысып ярҙы, күпләп мал аҫыраны, йәштән үк кирбестән оло йорт һалып инде.

Бәләкәйҙән ат яратып, ат йәнле булып үҫте Ғәзим. Ундайҙар тураһында ат ене ҡағылған тиҙәр. Аттарҙың да ниндәйҙәрен генә йүгәнләмәне ул! Әле лә ситтәге эшенән арып ялға ҡайтҡан ваҡыттарында, атҡа атланһам, үҙемде ҡанатлы ҡош кеүек тоя инем, тип хәтерләй. Боронғо риүәйәт, легендаларҙан уҙҙәренең тоҡро аттарында башҡорттарҙың Дон йылғаһынан Иртышҡаса, Тобол йылғыһының түбәнге ағымына тиклем гиҙеүҙәрен белгәс, уның күңелен ғорурлыҡ тойғоһо биләп ала ине. Бәлки бына ошо бала саҡтан ат өҫтөндә һыбай елеүҙәр, нигеҙҙә тиҙлек яратыу, йыраҡ ерҙәрҙе күреү хыялы, унда водитель булыу теләген уятҡандыр, моғайын.

Үҙ һөнәрендә уҙһенмәһәң, бөтә нескәлектәрен тойоп эшеңдә яратып башҡармаһаң 40 йылға яҡын руль артында ғүмер үткәреүе ай – һай ауырҙыр ул. Байтаҡ йылдар Ғәзим Ғинниәт улы, Башҡортостанда үҙенең 7 мең баш һыйыр малы булған комплексы менән киң билдәле, Ишембай районы «Искра» колхозында эшләне. Мал һимертеү комплексының иң алдынғы водителе булды! Хеҙмәте өсөн бирелгән төрлө билдәләр, Почет грамоталары, аҡсалата, әйберләтә бүләктәрҙе һынап бөтөрөрлөк түгел.

Йәшлек хыялы – илебеҙ Төньяғындағы байлыҡтарҙы үҙләштереүҙә ҡатнашыу теләге, уны бынан тиҫтә йылдар элек Ямал ярым утрауына килтерҙе. Бында ла ул үҙен егәрле, юғары квалификациялы водитель итеп таныты. Иптәштәр уның тураһында: «Ғәзимгә үҙеңә ышанған кеүек ышанырға була», – тиҙәр.

Ҡайны бераүҙәр Төньяҡта эшләүсе яҡташтарыбыҙҙы еңел табыш артынан ҡыуыусылар итеп күрһәтергә тырыша. Быңдағы тәбиғәт шарттары, эштәге тимер тәртип, оло яуаплылыҡ, ғаиләнән ситтә йәшәү ауырлығы тураһында уйлайҙармы икән улар?

Ғәзим Ишмөхәмәтов өсөн ике вахта араһы ял итеү ваҡыты түгел, ә эш төрөн алыштырыу ғыналыр. Сөнки ситтән ҡайтыу менән көнөндә үк донъя мәшәҡәттәренә сума ул. Һуңғы йылдарҙа ғына ҡыҙы Рәсилә менән кейәүенә, үҙе кеүек оҫта, егәрле Рөстәм улына гөлтләп торған иркен оло йорт һалып инергә лә ярҙам итте Ғәзим. Тормошона, яҙмышына һис тә зарланмай, һәр саҡ йөҙө нурлы, олоһо менән дә кеҫеһе менән дә йылмайып килеп күрешә. Бер ваҡыт буш йөрөмәй, машинаһын көйләнеме, аҙбарын таҙартһынмы, гөрләтеп ихласлап донья көтә. Ана шундай ауылдашыңды күрһәң, әҙерәк кенә аралашып һөйләшеп торһаң да, эшкә дәртләнеп китәһең. Үҙенең эшлеклеген, дәртен башҡаларҙың күңелендә лә уятырға һәләтле ул. Ғәзим ауылға ҡайтһа, ауыл урамына йәм инеп, йәнләнеп китә. Көндөҙ эштәрен тамалап, мал ҡураға ингәс, урамға сығып гармунда йәмле ауыл көйҙәрен матур итеп һыҙҙырып уйнай.

Бына тағы бер вахтаһы тамамланып килә. Өйҙә уны яратҡан ҡатыны Фәрзәнә, ейән-ейәнсәрҙәре һәм... яҙғы баҡса эштәре көтә. Илдең ҡайһы төбәгендә эшләһәләр ҙә, республикабыҙ, ауылыбыҙ данын арттыра ғына егәрле ауылдаштарыбыҙ. Улар барыһы ла әҙер механизаторҙар, тракторсылар, электриктар һәм башҡа һөнәр оҫталары. Был хеҙмәт көсөн республика иҡтисадына ҡайтарғанда, уларға эш урындары биреп, лайыҡлы хеҙмәт хаҡы түләгәндә, республикабыҙҙа ысынлап та бер түгел, бер нисә социаль мәсьәлә хәл ителер ине.

*Нурғәли ҒӘЛИН,*
*Ишембай районы Урман-Бишҡаҙаҡ ауылы*

≫ Тәрбиә

# БӘХЕТЛЕ БАЛА САҠ ҺАҒЫНДА

***31 май – Рәсәй Эске эштәр министрлығының балиғ булмағандарҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса хеҙмәткәрҙәрҙең һөнәри байрамы. Тап ошо көндә 1935 йылда СССР һәм ЦК ВКП(б)ның халыҡ комиссарҙары советы тарафынан «Балаларҙың ҡарауһыҙлығына ҡаршы көрәш» тураһында ҡарар ҡабул ителә һәм Эске эштәр министрлығы структураһында балиғ булмағандар эштәре буйынса бүлектәр ойоштороу башлана. Быйыл 80 йылдан ашыу ошо бүлектең хеҙмәткәрҙәре ауыр холоҡло, яҡлаусыһыҙ ҡалған үсмерҙәр яҙмышын дөрөҫ юлға һалыр өсөн ҙур тырышлыҡ һала. Әммә илдәге барған кире социаль күренештәр тәьҫирендә ундай үсмер балаларҙың һаны кәмемәй, киреһенсә йылдан – йыл арта бара. Быға бик күп факторҙар сәбәпсе. Шуға ла әлегә тиклем был өлкәлә эш бер ҙә кәмемәй. Бөгөнгө көндә лә балаларҙың хоҡуҡтарын һәм законлы мәнфәғәттәрен яҡлау һәм уларҙың социаль хәлен яҡшыртыу буйынса бик күп саралар уҙғарыла.***



*Гөлсәсәк Ғәлим ҡыҙы Иҫәнбәкова эш мәлендә*

Бала ғаиләлә тәрбиәләнергә тейеш. Сөнки ғаилә - баланың тәбиғи йәшәү мөхите. Тап ғаиләлә генә, ата – әсәләрҙең дөрөҫ тәрбиәүи эш алып барғанда ғына баланың йән һәм тән сәләмәтлегенең нигеҙҙәре һалына. Эске эштәр органдарының балалар һәм үсмерҙәр менән эшләү бүлексәһендә иң яуаплы бурыс – балалар яҙмышы, уларға дөрөҫ йүнәлеш биреү маҡсаты ҡуйылған. Шуларҙың береһе – үсмерҙәр араһында енәйәтселекте һәм хоҡуҡ боҙоуҙарҙы булдырмау, һәр яҡлап кисектереү. Бындай һөнәр буйынса осраҡлы кешеләр эшләй алмай. Маҡсатҡа тик һиҙгер йөрәкле, тәрән педагогик һәм психологик алымдарға эйә булған кешеләр генә ирешә ала. Был тармаҡта күбеһенсә ҡатын-ҡыҙҙарҙың эшләүенә һис тә ғәжәпләнерлек түгел. Ноябрьск ҡалаһында сығышы менән Башҡортостандан тыуып үҫкән яҡташыбыҙ полиция майоры Гөлсәсәк Ғәлим ҡыҙы Иҫәнбәкова байтаҡ йылдар дауамында балиғ булмағандарҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса баш инспектор вазифаһында тора.

Ун биш йәшенән кадеттар корпусында уҡып, кесе йәшенән үсмерҙәрҙең проблемаларын үҙ күҙҙәре менән күреп үҫкән Гөлсәсәк өсөн тәртип, форма, устав буш һүҙ түгел, ә ошо системаның уртаһында ҡайнап йәшәү рәүешенә әүерелгән.

Хеҙмәт юлын Башҡортостанда участка инспекторы булыуҙан башлаһа, 2008 йылда ире, улы менән Ноябрьск ҡалаһына күсеп килгәс, балиғ булмағандарҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса инспектор итеп тәғәйенләйҙәр.

Гөлсәсәктең эше ҡатмарлы, ауыр холоҡло үсмерҙәр, уларҙың ғаиләләре менән тығыҙ бәйләнгән. Ҡатын-ҡыҙ ғына баланың күңелен үҙенең эске һиҙгерлеге, тойомлауы менән аңлай алалыр. Шуға ла Гөлсәсәк Ғәлим ҡыҙы ла ундай үсмерҙәр менән уртаҡ тел тапҡан, уларҙың ышаныстарын яулап, яҡын дуҫына, яҡлаусыһына әйләнгән. Үсмерҙәр күп осраҡта ата - әсәләренән йәшергән серҙәрен дә ышаныслы, Гөлсәсәк апайҙары менән уртаҡлашырға әҙәтләнгән. Был аңлашыла ла. Сөнки бары тик ошо ышаныслы апайҙары ғына киҫкен хәлдә күҙ уңынан ысҡындырмай аңлап дөрөҫ йүнәлеш бирәсәк.

- Ғаиләләге проблемаларҙы үҙ ваҡытында кисектерергә кәрәк. Ошо маҡсатта беҙҙең тармаҡ тарафынан ойошторолған рейдтарҙа үсмер балаларҙың нисек итеп уҡыуҙан тыш буш ваҡыттарын файҙалы һәм үҙенсәлекле итеп уҙғарыуын асыҡлай. Беҙ оло технологик үсеш кисергән дәүерҙә йәшәйбеҙ. Интернет, социаль селтәрҙәр... Былар барыһы ла балаларҙың аң үсешенә, йәмғиәттәге тотошона ыңғай, йә кире тәьҫир итә. Һуңғы осор ошо юҫыҡта кире күренештәр ҙә күбәйеп киткән. Ошо хәлдә кисектереү буйынса ла төрлө саралар уҙғарабыҙ. Рейд барышында билдәләнгән ғаиләләрҙең ағзалары менән күҙгә – күҙ ҡарашып һөйләшәбеҙ, кәңәштәр бирәбеҙ, килеп сыҡҡан ауыр хәлдән сығыу юлдарын барлайбыҙ. Рейдтар даими ойоштоpола, унда ҡала хакимиәте етәкселеге вәкилдәре, телевидение, матбуғат саралары белгестәре менән берлектә уҙғарылыуы ла оло әһәмиәткә эйә. Һуңғы йылдарҙа маҡсатлы эш алып барылды. Шуға ла ыңғай һөҙөмтәләр күп. Тимәк эшебеҙ ни тиклем ауыр булһа ла байтаҡ ҡына ауыр холоҡло үсмерҙәрҙең яҙмышына ыңғай йоғонто яһай алғанбыҙ. Һуңғы йылдарҙа эшһеҙлек артыуы, рухи ҡиммәттәрҙе бөтөрөләүгә дусар булыуы байтаҡ ғаиләләрҙең нигеҙҙәрен ҡаҡшатыуға килтерҙе.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы үҙ ғаиләһенә битараф булғандар ҙа бар әле беҙҙең мөхиттә. Был осраҡта иң ауыры, әлбиттә, опека һәм попечителлек бүлеге белгестәре менән берлектә баланы ғаиләнән айырып махсус учреждениеларға тапшырыу. Үҙем әсәй булғанлыҡ, күрһәң, ошо күренештәрҙе бик ауыр кисерәм. Тирә – йүндәгеләргә, яҡындарына бала ышаныһын юғалта икән, һуңынан уны кире ҡайтарыуы ҙур проблемаға әүерелә. Дөрөҫ һәм тура юлға баҫтырыр өсөн беҙҙең өсөн бик күп ваҡыт һәм сабырлыҡ, ә үсмерҙәр өсөн ауыр һынылыш осорона ҡайтып ҡала. Шуға ла һөҙөмтәлә ундай үсмерҙәр менән йыл дауамында көсәргәнешле эш алып барырға тура килә, - ти Гөлсәсәк Ғәлим ҡыҙы.

- Ата-әсәләргә, ни тиклем эшкә сумған булһалар ҙа, балалары хаҡында оноторға ярамай. Балалар үҙ борсолоуҙарын ата-әсәләре, яҡындары менән уртаҡлашһын ине. Улар булған буш ваҡыттарын балалары менән бергә үткәрергә тырышһа, ниндәйҙер уҙҙәренә генә хас ғаилә йолаларын булдырһалар, бик һәйбәт. Ҡалабыҙҙа ундай өлгөлө ғаиләләр ҙә бар. Мәҫәлән, киске ашҡа мотлаҡ бергә йыйылып, кем көндө нисек файҙалы үткәреүен һөйләшергә, үҙ – ара кәңәшләшергә кәрәк. Балағыҙ өсөн дуҫ, кәңәшсе һәм яҡлаусы булығыҙ! Бала ата-әсәһенең үҙен ғәйепләүсе түгел, ә терәк булырына ышанырға тейеш. Шул ваҡытта ғына бала яҡындары менән бөтә ауырлыҡтары менән бүлешеп, проблемаларҙы бергәләп хәл итергә өйрәнәсәк. Һәр ғаилә ағзаһы ҡулынан килгәнсә бер-береһенә ярҙам итерлек, төрлө яҡлап хәстәрлек күрерлек итеп ойошторолғанда ғына ғаилә бәхетле буласаҡ.

*Ләйсән АҠСУЛПАНОВА*

Шәхес

# МИЛЛӘТЕБЕҘ НУРЫ – МИЛӘҮШӘ

*«Милләт нуры»ның тәүге һаны баҫылып сыҡҡас та, интернетта баҫманың электрон вариантын ҡуйғас, беҙгә Чехияла йәшәгән яҡташыбыҙ Миләүшә Ҡолмөхәмәтова – Годбодьтан изге эшебеҙҙе хуплаған йылы хаты килде. Алыҫ сит илдәге яҡташыбыҙ Миләүшә Мөтиғулла ҡыҙы ошо көндәрҙә үҙенең 60 йәшлек юбилейын билдәләүен ишеткәс, ихлас күңелле, журналист дуҫыбыҙҙы ҡотлап уға үҙебеҙҙең изге теләктәребеҙҙе газета аша еткерергә булдыҡ.*



*Юбиляр яҡташыбыҙ Миләүшә Ҡолмөхәмәтова – Годбодь*

Ишембай районы Ҡанаҡай ауылында һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Мөтиғулла Фәтҡулла улы менән Ғәлимә Сәхәүетдин ҡыҙының туғыҙ балалы ғаиләһендә үҫә ул. Йәштән үк шиғырҙар, хикәйәләр яҙып ҡарай. Дүртенсе синыфта «Ленинға» тигән тәүге шиғырын яҙа. 1972 йылда Башҡортостан комсомолының республика уҡыусылары өсөн ойошторған ижади конкурсында диплом яулай, Маҡтау ҡағыҙы менән шағир Яҡуп Ҡолмойҙан хат ала. Нәҫелдәше уға мәктәптән һуң университеттың филология факультетына уҡырға инергә тәҡдим итә. БДУ-ның филология факультетының башҡорт-рус төркөмө студенткаһы булып китә, «Шоңҡар» әҙәби-ижад түңәрәгенә йөрөй.

Башҡортостан республикаһының мәғариф отличнигы, «өлкән уҡытыусы», Рәсәй Федерацияны һәм Башҡортостан һәм Чехия республикаларының рус телле журналистар союзы ағзаһы булған Миләүшә Мөтиғулла ҡыҙының ижад һандығында биш йөҙҙән ашыу ғилми, тәнҡит, аналитик мәҡәлә, фельетон, хикәйә, очерк, сценарийҙар бар. Башҡортостанда юмор үҫешенә һәм «һәнәк журналы» тарихына арналған диссертацияны ла яҙылып бөткән, әммә сит илгә күсеп китеү сәбәпле, туҡталып яҡланмай ҡалған. Шулай ҙа «Башҡортостан рәссамдары» тигән йыйынтығы донъя күрергә тора, башҡорт баҫмаларында актуаль темаларға яҙылған яҙмаларын уҡыусылар көтөп ала, әленән әле сәйәхәтнәмәләре менән дә ҡыуандырып тора.

«Урал батыр» ыбыҙҙы ла сәйәхәтсе-юрист һәм тарихсы, тормош юлдашы Владимир Годбодь менән икәүләп чех теленә тәржемәләп урындағы халыҡҡа таныттҡандар улар. Легендар хәрби разведчик Даян Мурзин, шағир Яҡуп Ҡолмой, төркиәтсе Данис Тикеевтарҙың тормошон һәм ижадын өйрәнеп, уларҙың исемен мәңгеләштереүгә күп көс һалған Миләүшә ханым Ҡолмөхәмәтова-Годбодь әле лә ҡолаҡ киреп ижад тормошонда ҡайнай. Буш ваҡыты ла юҡ тип әйтерлек, гел хәрәкәттә: баҡсаһында еләк, раузалар үҫтерә, сейә, алма, ҡыҙыл һәм ҡара ҡарағаттары бар, шуларҙы тәрбиәләй, оҫта тегенсе лә ул.

Миләүшә апай Брно ҡалаһы буйлап велосипедта йөрөргә ярата, йорт мәшәҡәттәрен иптәше менән уртаҡ бүлгәс, ҡәләм тоторға ла ваҡыты ҡала. Тыуған яғын һағына башлаһа ҡурай көйҙәрен ҡуйып, халҡыбыҙҙың моңло йырҙарын тыңлай, бейеп тә ала. Ире быға һис тә аптырамай, ни тиһәң дә биш йыл эсендә халҡыбыҙҙың йолаларына күнегеп бөткән кеүек, хатта ҡатыны ыңғайына ашағандан һуң амин тоторға ла өйрәнгән ул.

Ун биш йыл ғүмерен журналистикаға, ун туғыҙ йылын башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыуға, балалар тәрбиәләүгә арнап, ғүмере буйы милләтенә хеҙмәт иткән ғәжәйеп эшмәкәр, ихлас күңелле яҡташыбыҙ Миләүшә Мөтиғулла ҡыҙы Годбодьты оло юбилейы менән ҡотлап уға оҙон бәхетле ғүмер, ҡоростай һаулыҡ теләйбеҙ.

***Ихтирам менән «Миләт нуры» гәзите коллективы хеҙмәткәрҙәре.***

Йәдкәр

# АҠҠОШТАР ҘА БЫЙЫЛ ИРТӘ ҠАЙТҠАН

*Нурия Фәнәүи ҡыҙы Фәтхелисламова 1970-се йылдың 18 авгусында Башҡортостан республикаһының Ҡариҙел районында тыуып үҫкән. Урта мәктәпте тамамлағас, 1988-1989 йылдарҙа Мәсғүт педагогия училищеһында, ә 1989-1994 йылдарҙа Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы факультетында белем ала. «Шоңҡар» әҙәби берекмәһендә шалкем-шалкем шиғырҙары менән сығыш яһай. 1992 йылда республика күләмендә уҙғарылған «Һылыуҡай» конкурсында ҡатнаша.*

*Әлеге ваҡытта ул тарих фәне буйынса диссертация яҡларға әҙерләнә, бынан тыш Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара академияһында ла уҡый.*



**ТЫУҒАН ЯҠ**

Ҡапыл килгән яҙҙар тыуған яҡҡа,  
Аҙашып та ҡайтҡан аҡҡоштар.  
Далаларҙы урап йөрөһәм дә,  
Ҡотә мине тауҙар, ҡайындар.  
Ашыҡтырып йүгерек Йүрүҙәнде,  
Ҡар һыуҙарын йыйып таллыҡҡа,  
Аҡҡоштар ҙа быйыл иртә ҡайтҡан,  
Һөйөү өҫтәп ысынбарлыҡҡа.  
Ағым – һыуҙар көтә, талдар көтә,  
Болоттар ҙа шунда ағыла.  
Үҙем – бында, күңел – унда йөрөй,  
Тыуған яҡты йөрәк һағына.  
Талғын ғына хәбәр итә елдәр,  
Һандуғастар ҡанат ҡағына.  
Ҡалҡа йәшәү, ҡайта ҡайнар һулыш,  
Тыуған яҡҡа шуға табынам!

**ХУШЛАШЫУ**

Ҡул сәғәтен ҡулдарымдан алып,  
Йыртып алып күңел дәфтәрен,  
Мин үткәндәр менән хушлашырмын,  
Асыуланма, ғүмер йәдкәрем.  
Сабырлығым йыйып йөрәгемә,  
Күпме йылдар һине һаҡланым.  
Килде ул мәл, һин бит мине түгел,  
Мин бит һине үҙем тапманым....  
Бик алыҫта ҡалды гөлдәр иле,  
Йәшлеге лә тыныс ятманы.  
Йөрәгемә урау әҙҙәр һалып,  
Бер туҡтауһыҙ алға атланы.  
Йөрәктәрҙә – оскон, күңелдә – яҙ,  
Аҡыл – һалҡын, ғүмер – тантана.  
Мин һынауҙар ҡуйҙым киләсәккә,  
Һәр сәғәтем шулай башлана.

**ШИҒРИӘТЕМ - ҠОШ ЮЛЫМ**

Аңлашылмаҫ көс һин - шиғриәтем,  
Төпкөлдәрҙән сыҡҡан моң – шишмәм,  
Сылтыр – сылтыр моңдар һуҙаһың да,  
Ташҡын булып ташаһың ҡуптән.  
Ер аҫтының утлы ялҡыны лай,  
Ҡайнай – ҡайнай хистәр илендә,  
Атылаһың күңел йыһанының  
Салт ҡояшлы зәңгәр күгенә...  
Һәм көтәһең ләйсән ямғыр тамған,  
Дауылдарға йылдар түҙгәнен.  
Ай – һылыуҙың ергә көлгән сағын,  
Йондоҙҙарҙың янып һүнгәнен.  
Болот ҡаплап утһа, томан булһа,  
Һин һайлаған урау юлдарҙы.  
Ҡалтыранып ыжғыр бурандарҙа,  
Һин һорайһың сабыр булғанды.  
Атылыусы ла һин, ҡайнаусы ла,  
Ҡуҙәтеүсе ғашыйҡ – бер юлы.  
Күңел киңлегенең ышанысы,  
Аҙаштырмаҫ тоғро ҡош юлы!!!

Ҡотлауҙар



**Баймаҡ районы Үрге Иҙрис ауылында тыуып үҫкән, хәҙерге көндә Сургут ҡалаһында йәшәүсе Зөлхизә Рөстәм ҡыҙы Сәлихова ошо көндәрҙә тыуған көнөн билдәләй.**

**Яҙ миҙгеленең бер көнөн йәмләп, 22 йыл элек ғаиләлә беренсе бала булып тыуҙың донъяға! Тормошобоҙ йәме - ҡыҙыбыҙ, апайыбыҙ! Бөгөн һинең иң матур көнөң, тыуған көнөң! Ошо көндә һин теләгән бар теләктәрең тормошҡа ашһын, изге хыялдарың яҡынайһын! Һин беҙгә терәк тә – таяныс та, серҙәш тә, ҡустыңа үрнәк алырлыҡ ихлас күңелле, оло йөрәкле апай ҙа.**

**Ҡыҙым! Тормошта бар ауырлыҡтар һине аралап үтһен, юлыңда һәр саҡ яҡшы кешеләр осрап торһон, шатлыҡлы көндәргә күмелеп, ҡатын-ҡыҙ бәхетен тойоп, оҙон-оҙаҡ бәхетле булып йәшәргә яҙһын!**

**Күркәм яҙ миҙгелендә сәскәләр атҡан кеүек, тормошоң тик иҫтәлекле мәлдәргә күмелеп үтһен! Үҙең тәүфиҡлыһың, һылыуһың, аҡыллыһың һәм шуға ла донъяла иң бәхетле ҡатын-ҡыҙ булырға яҙһын,ҡыҙым һиңә!**

**Ғүмереңдең яҡты киләсәген  
Алһыу таңдар аша ҡаршыла,  
Юлдарыңда булһын гел шатлыҡтар,  
Бәхет көтөп торһон ҡаршыңда.  
Ҙур уңыштар һиңә юлдаш булһын,  
Көндәреңде шатлыҡ биҙәһен.  
Сәләмәтлек-ярты бәхет, тиҙәр  
Ошо бәхет ситләп үтмәһен!**

***Ҡотлау менән әсәйең Нурия, ҡустың Рәмзил!***

Главный редактор: Бурангул Галин.
Редакционный совет: Ляйсан Аксулпанова, Денис Абдуллин, Ильшат Бикбулатов.
Контакты: 89124209483, bashkirlife@mail.ru, г. Ноябрьск, ЯНАО.
Верстка и печать в типографии ООО «Полиграфия», 453261, РБ, г. Салават, ул. Ленина, 5/11, тел. (3476) 35-31-02.
Тираж 999 экз. Заказ 7389.

Спонсор издания ООО «Лидер Транс»
Основной вид деятельности:
автотранспортные услуги.
Генеральный директор:
Ирик Фахретдинович Максютов.